# ВЕСТИ В КАЖДЫЙ ДОМ

Зианчурского района

ИНФОРМАЦИОННЫЙ ЛИСТОК

Декабрь 2020 д.Идельбаково №1




2020 йыл Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы тарафынан Башҡорт теле йылы тип иғлан ителде һәм был тәкдимде Республика Башлығы Хәбиров хупланы. Телде үҫтереү , яҡлау һәм һаҡлау маҡсатында республикала, районда бик күп мәҙәни саралар үткәрелде.

Әйтергә кәрәк, беҙҙең мәктәп өсөн был йыл бик уңышлы башланып китте. 11 класс уҡыусыһы Жубатова Рилана башҡорт дәүләт теленән район олимпиадаһында еңеү яулаһа, башҡорт теле һәм әҙәбиәте регион- ара олимпиадала призер булды. Был инде республика кимәлендә унын икенсе тапҡыр еңеү менән ҡайтыуы.

Уҡыҙа алдынғылыҡты бирмәгән тырыш ҡыҙ быйыл мәкәтпте алтын миҙалға тамалап. Башҡорт дәүләт университетының биология факультетында белем ала.



БАШҠОРТОСТАН РЕСПУБЛИКАҺЫ
МӘҒАРИФ ҺӘМ ФӘН МИНИСТРЛЫҒЫ

Диплом

Башҡорт теле һәм әҙәбиәте
буйынса регион-ара олимпиада

ПРИЗЁРЫ

*Жубатова Рилана,*
*Ейәнсура районы Иҙелбәк урта дөйөм белем биреү мәктәбенең XI класс уҡыусыһы*

бүләкләнә

*Трубкулова Г.Р.*
(уҡытыусыһы)

Министр А. В. Хажин

Өфө – 2020



ПОЧЕТНАЯ ГРАМОТА

Муниципальное казенное учреждение
«Отдел образования Администрации муниципального района Зианчуринский район Республики Башкортостан»

НАГРАЖДАЕТ

ученицу XI класса муниципального общеобразовательного бюджетного учреждения средняя общеобразовательная школа д. Идельбаково

***Жубатову Рилану,***

занявшую I место в районной олимпиаде по государственному (башкирскому) языку
(учитель Трубкулова Г.Р.)

Начальник Р.А.Идельбаева

Исянгулово — 2020 г.

Халыҡ –ара туған телдәр көнөнә арнап, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары тарафынан “Йөрәк һүҙе” шиғри бәйгеһе ойошторолдо Был бәйгелә уҡыусылар менән бер рәттән уҡытыусылар һәм ата-әсәләр ҙә һынау тотто. Барлығы 19 ҡатнашыусы булды.

Өлкән ҡатнашыусылар араһында үҙенең башҡарыу оҫталығы, хислелеге, көр тауышы менән Ниязғолова Луиза ҡыҙы айырылып торҙо.Ул Рәми Ғариповтың билдәле “Туған тел” шиғыры менән еңеү яуланы. Бикбулатова Миңлегөл Ғайса ҡыҙы һәм Әхмәрова Нәркәс Ғәзиз ҡыҙы II урынды бүлештеләр.Ә III урынға Бикмөхәмәтова Айгөл сыҡты.

Уҡыусылар араһында еңеүҙе Шәйехзада Бабичтың “Кем өсөн” шиғыры менән 5- се класс уҡыусыһы Дәүләтова Рәйлә яуланы. Ә инде II урында Бикмөхәмәтова Регина һәм Куланчина Айгөл, III урында Дәүләтшина Аида.

Еңеүселәр ҙә, барлыҡ ҡатнашыусылар ҙа төрлө номинацияларҙа маҡтау ҡағыҙы менән бүләкләнделәр.

Бәйге Башҡортостандың халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың “Туған тел” шиғырына флешмоб менән тамаланды



21 февраль көнө Йылайыр районының Йылайыр ауылында күренекле башҡорт шағиры, башҡорт әҙәбиәте классигы , башҡорт милли хәрәкәте эшмәкәре , башҡорт Хөкүмәте ағзаһы Шәйехзада Мөхәмзәкир улы Бабичевтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған, Башҡорт дәүләт университетының Стәрлетамаҡ филиалы тарафынан ойошторолған шиғыр ятлаусылар конкурсының зона ярышы үтте. Был сарала Йылайыр, Күгәрсен, Әбйәлил, Хәйбулла, Ейәнсура райондары, Сибай ҡалаһы уҡыусылары әүҙем ҡатнашты. 5-се класс уҡыусыһы Дәүләтова Рәйлә шағирҙың “Халҡым өсөн” шиғырын ятҡа һөйләп, III урынға лайыҡ булды.







2020 йылдың 20 мартында Башҡортостандың Әлшәй районында Еңеүҙең 75 йыллығына арналған “Шербаков уҡыуҙары” республика фәнни-ғәмәли конференцияһы уҙғарылды. Был сарала 4- се класс уҡыусыһы Йәркәева Аделя “Һуғыш тураһында ишететеп кенә беләм” исемле иншаһы менән еңеү яуланы. Ә һүрәттәр конкурсында 8-се класс уҡыусыһы Ҡолсурина Лия “Еңеү яҙы” эше менән III урын, 8- се класс уҡыусыһы Бикмөхәмәтова Ралина “Еңеү яҙының йәшен тауышы” эше менән II урынға лайыҡ булды. 9- сы класс уҡыусыһы Төрөпҡолов Надир ҙа иншалар конкурсына “Һуғыш батырҙары беҙҙең яҡташтар” исемле иншаһы менән ҡатнашыусы хоҡуғына эйә булды.

2020 йылдың 25 мартында Сибай ҡалаһында уҙғарылған Х.Н. Тапаковтың ижадына һәм Бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығына арналған “Тапаков уҡыуҙары” конференцияһында 9 -сы класс уҡыусыһы Төрөпҡолов Надир үҙенең “Һуғыш балалары” иншаһы менән еңеү яуланы.


ДИПЛОМ УЧАСТНИКА
I СТЕПЕНИ
зонального конкурса «Тапаковские чтения - 2020», посвященного творчеству Х.Н. Тапакова, приуроченного к 75-летию Победы в Великой Отечественной войне

11 сентябрь Милли кейемдәр көнөндә беҙҙең мәктәп тә ситтә ҡалманы.





16 нобрҙән 14 декабргә тиклем мәктәптә башҡорт теле айлығы үткәрелде : КВН, “Тел бәйгеhе”,һүрәттәр конкурсы, мәғрифәтсе шағир Мифтахетдин Аҡмулла ижадына арналған дәрестәр үткәрелде. Уҡыусылар шулай уҡ М.Аҡмулла ижады буйынса үткәрелгән диктантта, “Тел серҙәре” интернет бәйгеләрҙә ихлас ҡатнаштылар.








*Төрөпколова Гөлназ Рафик кыҙы, Башкорт теле һәм әҙәбиәте уытыусыһы*

## Һуғыш балалары.

Бөйөк Ватан һуғышы йылдан –йыл алыҫлаша барһа ла, уның шаңдауы кешеләр күңеленә әле лә тынғы бирмәй.Ул йылдарҙың ауырлығын үҙ иңдәрендә татыған һуғыш ветерандары, тыл хеҙмәтсәндәре күргән-кисергәндәрен бөгөн дә күңеленән сығармай. Йәш быуын ул дәһшәтле йылдар тураһында ишетеп, китаптарҙан уҡып, киноларҙан ҡарап ҡына белә. Ә бөтә халыҡ, ил яҙмышын хәл иткән Бөйөк Ватан һуғышы фажиғәһен бөгөнгө генә түгел, ә киләсәк быуынға ла еткереү бик мөһим.

Башҡортостанда ғына түгел, бөтә илдә һуғыш фажиғәһе ҡағылмаған бер генә ғаилә лә ҡалмай. Ҡайғы еле минең ҡартайым Ишкильдин Рафиҡ Солтан улына ла килеп ҡағыла ,үкһеҙ етем ҡалдарып, атаһы Ишкильдин Солтан Дәүләтша улы ла 1942 йылдың апрель айында хәбәрһеҙ юғала.Күп тә тормай әсәһе лә үлеп ҡала.Өләсәйемдең атаһы Ҡолсурин Зәкәриә лә ҡаты Сталинград һуғышында хәбәрһеҙ юғала.

Ә яҙасаҡ һүҙем ҡартайым һуғыш балалары Ишкилдин Рафиҡ Солтан улы һәм өләсәйем Ишкилдина Гөлниса Зәкәриә ҡыҙы тураһында булыр.

... Һуғыш балалары , тип йөрөтәләр уларҙы. Сөнки атайһыҙлыҡ, аслыҡ, яланғаслыҡ , өйһөҙлөк, етемлек уларҙы урап үтмәй.Күпме ҡайғы –хәсрәт кисергәндәрен улар тик үҙҙәре генә белә. Ләкин һәр нәмәгә шөкөр итеп йәшәй белделәр улар. Бер ваҡытта бер нәмәгә зарланмаҫ, сабыр булдылар.

Ҡартайым 1937 йылдың 3 майында йәмле Ҡаҫмарт буйында урынлашҡан Юнай ауылында колхозсы Ишкилдин Солтан һәм ғаиләһендә дүртенсе бала булып донъяға килгән.

Оҙаҡламай бөтөн илгә ҡара һөрөм һалып Бөйөк Ватан һуғышы башланып китә. Ҡартайымдың атаһы ла һуғыштың тәүге көндәрендә үк фронтҡа ебәрелә. Оҙаҡламай әсәһе Хәлимә лә ҡаты ауырып түшәккә йығыла. "Тышта малайҙар менән уйнап йөрөй инем, әсәйең менән хушлаш тип инәйҙәр саҡырып индерҙе. Әсәйем урындыҡта ята ине. Йоҡлап ята бит, нисек мин уның менән хушлашайым, тип аптыраным да, уйнарға сығып йүгерҙем",- тип иҫләй ул көндәрҙе ҡартайым. Биш йәшлек сабый ғына нимә аңлаһын инде ул ваҡытта.

Үкһеҙ етем ҡалған атайымды фронтовик ҡатыны, апайы Ишкилдина Ғәйзә алып аҫрай. Ҡаты булды , тип иҫләй ҡартайым . "Аслыҡтан нимә ашарға белмәгәндә, сөсө икмәктең ситен генә әйләндереп кимереп сыҡтым, ләкин ҡайтҡас апайым сыбыҡ менән туҡманы, йоҡларға урынды ла урындыҡ аҫтына һалып бирә торғайны,"-тип хәтерләй ул көндәрҙе. Бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан эшкә ҡуша ине. Әгәр ҙә ваҡытында өлгөрмәһәң, сыбыҡларға ла күп һорамай торғайны., ти ул апаһы тураһында.

Бар ерҙә аслыҡ хөкөм һөрә , өҫкә кейергә кейеме лә булмай ул замандарҙа күптәрҙең. Тик һәр кем дә ла йәшәүгә ынтылыш көслө була.Ҡыштарҙы сығыуы еңел булмай барыһына .Яҙ етеү менән генә кешеләрҙә тағы ла яңы өмөт уяна. Тәбиғәт -Әсәнең һыйы күп: ҡаҡы, кесерткән, балтырған, ҡуҙғалаҡ. Ә йәйен төрлө-емеш еләк ҡотҡара аслыҡтан итеккән халыҡты.

Шулай бер –бер артлы ауыр көндәр үтә тора. Бына тағы ла ҡайғы еле ҡартайыма килеп ҡағыла, әсәйһеҙ ҡалыуы етмәгән,

1942 йылдың 24 апрелендә атаһының хәбәрһеҙ юғалыуы тураһында ҡара ҡағыҙ килә. Береһенән-береһе ауыр көндәр ағыла тора. Йоҡларға ятҡанда уҡ балаларҙың иртәгә нәмә менән тамаҡ туйҙырыу тураһында уйы баштарынан сыҡмай. Бер көн бер туғанында, икенсе көн икенсе туғанында йөрөп үткәрә көндәрен ҡартайым.

Тиҙҙән Байыш ауылында балалар йорто асыла. Унда, исмаһам, тамағы туҡ булыр, тип атайымды өлкән ағаһы Шаймарҙан балалар йортона тапшырырырға була. Апрель айы, ҡар иреп ағып ятҡан мәл. Ҡартайым ағаһы менән йәйәү юлға сыға. Аяҡҡа кейергә аяҡ кейеме юҡлыҡтан быйма кейгән ҡартайымдың аяғы Байыш ауылына барып еткәнсе лысма һыу була. Ара ла алыҫ ҡына, туранан ун саҡрымдан ашыу. Барып етер-етмәҫ, ағаһы быйманы сисергә ҡуша. Ҡартайым аптырап ҡала,ағаһы, балалар йотонда йәлләп, бәлки, алырҙар тип аңлата. Барып еткәнсе аяғы боҙ кеүек ҡатҡан атайымды ысынлап та бер –һүҙһеҙ ҡабул итәләр. Шулай бер-бер артлы көндәр үтә. Балалар йортонда ауыр булһа ла, тамаҡтары әҙерәк туйып ҡала. Мәктәпкә йәше еткәс, Байыш урта мәктәбендә уҡырға бара. Ул ваҡытта Байыш мәктәбенә төрлө күрше ауылдарҙан килеп белем алғандар. Уларҙың һаны 700-ҙән ашып китә. Ҡартайым да тырышып-тырмашып белем ала. Үҙе тырыш булғанға уҡыу ҙа еңел бирелә.

Тиҙҙән балаларҙы Стәлетамаҡтағы балалар йортона күсерәләр. Хәҙер исемдәре бөтә Башҡортостанға билдәле Бәхти Ғайсин, Рамаҙан Йәнбәков, Сабир Байбулатов, Таһир һәм Хәсән Дәүләтбәковтар менән бер осорҙа тәрбиәләнә ул балалар йортонда. Ошо осорҙа тарих менән ҡыҙыҡһыныуы арта. Тик артабан мәктәпте тамамларға насип булмай.Рамаҙан ағаһы өйҙә ярҙам кәрәк тип, ҡустыһын алып ҡайтып китә.Артабан уҡыуын Байыш мәктәбендә дауам итә. Шулай итеп, бер-бер артлы көндә үтә, мәктәпте тамамалағас, колхозда ат ҡараусы булып эшкә сыға.

Өләсәйем Ҡолсурина Гөлниса Зәкәриә ҡыҙы 1939 йылдың йәмле май айында тәү көнөндә Ҡыуат ауылында икенсе бала булып донъяға килгән.

Бөйөк Ватан һуғышы башланып киткәс тә атаһы Зәкәриә Ҡолсуринды фронтҡа алалар. Әсәһе колхозда көнө-төнө бил бөгә. Төрлө эштәрҙә эшләй. Ләкин өләсәйемдең әсәһенә Сафия Күсәрбаеваға ла ФЗО-ға саҡырыу ҡағыҙы килә.Йәш ярымлыҡ өләсәйемде бер туған һеңлеһенә ҡалдырып юлға сыға. Ырымбур өлкәһе Һарыҡташ станцияһына барып еткәс, өйҙә ҡалған балаһын уйлап, йөрәге өҙөлөүгә түҙмәй, вагонға тейәлергә ваҡыт еткәндә, тиҙ генә ситкә тайшанып, ҡасыу юлын ҡарай. Һарыҡташтан йәйәү ҡайтып етә, бер ҡат кейем менән, өләсәйемде санаға ултыртып, Байыш ауылына юллана. Балаһына булған һөйөүенә хатта ҡайҙа барып морон төртөрлөк урыны булмауы , таныш булмаған мөхит тә ҡурҡытмай уны. Бер эштән дә ҡурҡып тормай Сафия өләсәйем колхоз ниндәй эшкә ҡушһа, шунда эшләй, атын да ҡарай, сусҡа , бызауын да, кәрәк икән төндә ат көтөргә лә сығып китә. төндәрен мәктәптә ҡарауылсы булып эшләй. Ул ваҡыттарҙа Сафия өләсәйем ҡыҙын парталар өҫтөндә йоҡларға һала. Тәүҙә улар туған тейешле Лотфулла ағайҙарына өйҙәш булып инәләр. Ул ваҡыттағы кешеләрҙең киң күңеллегенә әле булһа иҫе китә өләсәйемдең. Үҙҙәренең күп балалалы ғаиләһе өҫтөнә, Сафия өләсәйемде ҡыҙы менән һыйҙыралар. “Күмәкләп бер урындыҡта йоҡлап йөрөнөк, бергә ултырып ашай инек. Тамаҡҡа ашарға ла йүнле тамаҡ та булманы”,- тип әсенеп хәтерләй ул көндәрен өләсәйем. Өҫкә кейер кейем юҡлыҡтан Сафия өләсәйем мәктәптә ҡарауылсы булып эшләгәндә алып ҡайтҡан иҫке картанан буяп, күлдәк тегеп бирә. Әсәйем оҙаҡ

ҡына шул күлдәген кейеп йөрөй.

Кешелә йәшәүҙән арығас,Сафия өләсәйем булған түшәк-ярағын алып, колхоздың малсылар өйөнә күсенә. Ә унда инде көнө буйы кеше өҙөлмәй, бәрәс, быҙауҙырҙы индереп бикләйҙәр, тын алыуы ауыр, һыуыҡ булһа ла барыр урындары булмағас, ҡайҙа барһындар, түҙәләр инде. Сафия өләсәйем ҡыҙын йәлләп: “Эй, ошо баламдың үпкәһенә зыян була инде,”- тип төндәрен баш аша юрғанды бөркәп йоҡлата. Ә юрған аҫтында тын алыуы ҡыйын, башты сығарһаң ауыр еҫ, тип хәтеренә ала өләсәйем ул көндәрен.

Шулай кеше тупһаһында нисә йылдар этләнгәндән һуң Сафия өләсәйем ирһеҙ булһа ла бәләкәй генә ер иҙәнле өй төҙөп сығыуға өлгәшә. Сыҡҡас та урындыҡта “Үҙ өйөм -үлән түшәгем”,- тип аунап йөрөп иланы әсәйем, ти өләсәйем. “Ул нигеҙебеҙ ҡотло булды, тормош та әҙерәк яйға һалынды”,-тип иҫкә ала ул ваҡыттарын өләсәйем.

Ул ваҡыттағы кешеләрҙең сыҙамлығына иҫең китерлек, көнө-төнө эштә. Көндөҙ колхоз эшендә мал , сусҡа, бәрәс, быҙау ҡараусы, һауынсы, мәктәптә төнгө ҡарауылсы булып эшләй ул йылдарҙа Сафия өләсәйем.Шулай булыуға ҡарамаҫтан Сафия өләсәйем өләсәйемә барлыҡ йөрәк йылыһын биреп, наҙлап, яратып үҫтерә.Кейәүгә сыҡҡансы ҡосаҡлашып йоҡлай инек ине, ти, ул .

“ Ғүмер буйы атайлы кешеләргә күҙем ҡыҙып йәшәнем. Атай һөйөүе, атай наҙы етмәне. Хатта мин атайымдың ниндәй икәнен дә белмәйем. Сталинград эргәһендә һуғышабыҙ тигән бер генә хаты һәм хәбәрһеҙ юғалды тигән ҡағыҙ ғына килде”,- тип

Өләсәйем шулай ауырлыҡтарға ҡарамай буй еткерә. Ҡартайымдан яусы килеп төшә. Әсәйем ризалығын бирмәһә лә. Өләсәйем ризалығын бирә.

Шулай 1959 йылдың 4 апрелендә яңы ғаилә барлыҡҡа килә. Улар дүрт балаға ғүмер биреп, оло тормошҡа аяҡ баҫтырҙылар. Әлеге көндә һәр береһе ғаиләле. Балалар йортонда тәрбәләнһә лә ҡартайым изге күңелле, алсаҡ йөҙлө бала йәнле булды.Бер ваҡытта та балаларына ҡайыш түгел, тауыш та күтәрмәне, ауыҙына араҡы ла алманы, тәмәке лә тартманы. Бар яҡтан балаларына, ейәндәренә өлгө булып тоҙо. Ул колхозда төҙөүсе,ат ҡараусы, урмансы, киномеханик булып эшләп хаҡлы ялға сыҡты. Ә өләсәйем Башҡорт кооператив техникумын тамалап, һатыусы, почтальон булып эшләне, ҡатын-ҡыҙҙар советы рәйесе булды. Әллә нисә йыл рәттән ауыл советы депутаты булып һайланды.

Һәр яҡтан өлгө алырлыҡ ҡартайым менән өләсәйем булыуына яҙмышыма рәхмәтлемен.Балаларын ғына түгел, ейәндәренә лә оло таяныс булдылар улар.

*Төрөпколов Надир*
*9-сы класс укыусыһы*

## Таҡмаҡтар

Уҡытыусым йәл һине
Ҡағыҙ менән күмелдең.
Ҡасан ғына дәрт биреп
Дәрес бирәһең инде?

Беҙҙең алда фәндәр тауы
Нисек менәһе икән?
Уҡытыусым алып менә
Альпинист кеүек икән.

Мәктәпкә беҙ барабыҙ
Дәртләнешеп уҡырға.
Уҡытыусы ҡаршы ала
Йылмайыуы ни тора.

“Оптимизация”,- тип
бошонма һин
Күңел һалып эшкә кил.
Бөтмәҫ әле капитал
Эшһеҙ ҡалмаҫһың әле.

*Иҙелбәкова Илүзә.*

Адрес редакции:
453393. Республика
Башкортостан
Зианчуринский район.
д. Идельбаково
ул. Школьная, 31

Ответственный за газету
Трубкулова Г.Р.
Акманова Л.Г.
Газета выходит 2 раза в месяц.
Телефоны для справок:
8 (34785) -2-32-66
e-mail: idelbak@zianroo.ru